Тәрбиәсе булыу еңел түгел...

Донъяла һөнәрҙәр бик күп, әммә шулар араһында һин һайлаған түгел, киреһенсә, үҙе һине һайлағандары бар. Шуларҙың береһе – тәрбиәсе һөнәре. Бында осраҡлы кешеләр булмай, йәки булырға тейеш түгел, яңылыш эләккәндәр бында оҙаҡ эшләй алмай. Тәрбиәсе булыу – тыумыштан килгән, Аллаһы Тәғәлә оло вазифа итеп биргән һәләт ул.

Хәҙерге заман шарттарында тәрбиәсе булыу ауыр ҙа, яуаплы ла. Минеңсә, был эштә күп төрлө белем, тәжрибә генә түгел, бик ҙур түҙемлелек тә, даими ижади эҙләнеү ҙә, эшкә һәр ваҡыт ниндәйҙер яңылыҡ индереп тороу ҙа кәрәк.

Балалар менән аралашыуҙан үҙемә яңы нәмәләр асам. Балалар үҙгәрә, улар менән бергә мин дә үҙгәрәм. Әйләнә-тирә мөхит тураһында балалар күҙлегенән ҡарап фекер йөрөтөү миңә оҡшай. Шунан шатлыҡ һәм ҡәнәғәтләнеү табам.

Һәр иртә һайын, эшкә килгәс, балаларымдың күҙҙәрен күрәм: ҡайһы берҙәрендә – күңелһеҙләнеү, икенселәрендә – ҡыҙыҡһыныу, өсөнсөләрендә – өмөт. Шул тиклем төрлө-төрлө бит ул балалар! Һәр береһенең үҙ фекере, үҙ донъяһы бар. Ул донъяны һис кенә лә емерергә ярамай, уға асылырға ярҙам итергә кәрәк.

Баҡсала мин балаларға башҡорт телен өйрәтәм, туған телдең матурлығын, ҡөҙрәтен аңларға ярҙам итәм, телебеҙҙе яратырға, халҡыбыҙҙың рухи байлығы, тарихы менән кесе йәштән үк ҡыҙыҡһынырға саҡырам.

Мин яҙмышыма был ауыр хеҙмәтте башҡарырға ярҙам иткәне өсөн рәхмәтлемен. Хыял ҡанаттарым сикһеҙ минең. Үҙемә, яҡындарыма ни теләһәм, балалар баҡсаһында үҙем тәрбиәләгән балаларыма ла шул теләктәмен. Киләсәктә тәүфиҡлы, иманлы, тәрбиәле, рухлы балалар булып үҫеүҙәрен, үҙҙәре һайлаған ҙур тормош юлынан ғорур атлауҙарын теләйем.